**Марат ЗӘЙНУЛЛИН**

# Башҡорт халҡының ғорурлығы

*Крәҫтиән үҙ ерен нисек ярата,*
*мин үҙ телемде шулай яратам.*
Назым Хикмәт

Атаҡлы башҡорт ғалимы, донъя тюркологияһында киң билдәле фән әһеле һәм талантлы әҙип профессор Жәлил Ғиниәт улы Кейекбаевтың ғилми-теоретик һәм әҙәби мираҫы башҡорт филологияһы һәм төрки тел ғилеме тарихында айырым бер урын алып тора. Был тәбиғи, сөнки Ж.Ғ.Кейекбаев — хәҙерге заман башҡорт тел ғилеме мәктәбенә нигеҙ һалыусы шәхес. Уның хеҙмәттәренең ғилми әһәмиәте илебеҙ һәм донъя фәне өсөн баһалап бөткөһөҙ.

Ж.Ғ.Кейекбаевтың ғилми һәм әҙәби ижады бик емешле: ул үҙенең сирек быуат ҡына дауам иткән ижад ғүмерендә тик лингвистик проблемаларға арналған 100-ҙән артыҡ хеҙмәт яҙҙы. Телсе ғалим булыу менән бер рәттән ҙур яҙыусы ла, ялҡынлы публицист та, оҫта педагог та, күренекле дәүләт эшмәкәре лә ине.



*Марат Вәли улы Зәйнуллин 1935 йылда Күгәрсен районында уҡытыусы ғаиләһендә тыуған. 1954 йылда Морак педагогия училищеһын, 1959 йылда Башҡорт дәүләт университетының тарих-филология факультетын ҡыҙыл диплом менән тамамлай. 1959—1962 йылдарҙа аспирантурала уҡый. Уның ғилми етәксеһе арҙаҡлы ғалим профессор Ж.Ғ.Кейекбаев була.*

*1962 йылдан Башҡорт дәүләт университетында эшләй. Хәҙерге көндә университеттың башҡорт филологияһы һәм журналистика факультеты деканы, башҡорт һәм дөйөм тел ғилеме кафедраһы мөдире, филология фәндәре докторы, профессор. М.В.Зәйнуллин — 350-нән ашыу ғилми хеҙмәт, шул иҫәптән 10 монография һәм дәреслектәр авторы. Ул — Башҡортостандың атҡаҙанған фән эшмәкәре, Башҡортостан Республикаһы Фәндәр академияһының ағза-корреспонденты, СССР һәм Рәсәй Федерацияһының юғары белем биреүҙең почетлы хеҙмәткәре, Жәлил Кейекбаев исемендәге премия лауреаты.*

Профессор Ж.Ғ.Кейекбаев 1911 йылда Башҡортостандың Ғафури районы Ҡаранйылға ауылында крәҫтиән ғаиләһендә тыуған. 1926 йылда Сәйетбаба ауылында башланғыс мәктәпте тамамлай, унан һуң Маҡар ауылындағы колхоз йәштәре мәктәбендә уҡый. 1932 йылда Өфөлә башҡорт педагогия техникумының тел һәм әҙәбиәт бүлеген тамамлай. 1932—1937 йылдарҙа Мәскәү сит ил телдәре педагогия институтында уҡый һәм уның герман филологияһы бүлеген уңышлы тамамлап сыға. Бер йыл Мәскәү өлкәһендәге Рошаль урта мәктәбендә немец теле уҡытыусыһы булып эшләй. 1938—1942 йылдарҙа Башҡортостан вуздарында сит ил телдәрен уҡыта. 1942—1943 йылдарҙа Ж.Ғ.Кейекбаев Ғафури районында Сәйетбаба урта мәктәбенең директоры була, бер үк ваҡытта немец һәм инглиз телдәрен уҡыта. 1943—1944 йылдарҙа — Башҡортостан китап нәшриәтенең баш редакторы. 1944 йылда СССР Яҙыусылар Союзы ағзаһы итеп ҡабул ителә. 1945—1946 йылдарҙа Мәскәүҙә СССР Фәндәр академияһының Тел белеме институтында аспирантурала уҡый. 1946—1948 йылдарҙа — Өфө авиация институтында немец теле уҡытыусыһы. 1948 йылдың 16 июлендә Мәскәү дәүләт университетының ғилми советында филология фәндәре кандидатлығына диссертация яҡлай. 1948—1957 йылдарҙа Башҡорт дәүләт педагогия институтында сит ил телдәре факультеты деканы, аҙаҡтан башҡорт теле кафедраһы мөдире булды. 1960 йылда Мәскәүҙә Тел белеме институтында докторлыҡ диссертацияһы яҡлай. 1961 йылда Ж.Ғ.Кейекбаевҡа профессор дәрәжәһе бирелә. 1957 йылдан 1961 йылға тиклем Башҡорт дәүләт университетының проректоры вазифаһын башҡарҙы. 1961 йылдан һуң башҡорт теле кафедраһы мөдире булып эшләне. Профессор Ж.Ғ.Кейекбаев 1968 йылдың 19 мартында ҡапыл вафат булды.



*Жәлил Ғиниәт улы Кейекбаевтың йәш сағы*

Жәлил Ғиниәт улы Кейекбаевтың фәнни эшмәкәрлеге аспирантурала уҡып йөрөгән сағында башлана. Уның фәнни ҡараштарының формалашыуында исеме бөтә донъяға билдәле атаҡлы төрки телдәр белгесе, башҡорт лингвистикаһының нигеҙ таштарын һалыусы, СССР Фәндәр академияһының ағза-корреспонденты профессор Н.К.Дмитриевтың (1898—1954) роле ифрат ҙур. Мәскәү сит ил телдәре институтында уҡыған сағында ул дөйөм тел буйынса күренекле тел белгесе профессор Р.О.Шор һәм башҡа ғалимдарҙың лекцияларын тыңлай. Фән донъяһында исеме киң билдәле тел ғалимы, герман телдәре белгесе М.М.Гухман ул саҡта немец теле кафедраһының уҡытыусыһы һәм факультет деканы була.



*Ж.Кейекбаев улы Морат менән. 1963 йыл*

Институтты тамамлағас, Ж.Ғ.Кейекбаев байтаҡ йылдар мәктәптәрҙә һәм вуздарҙа немец телен уҡыта, авиация институтының немец теле кафедраһының доценты һәм мөдире булып эшләй. Әммә ул башҡорт теле менән шөғөлләнеү уйын бер ваҡытта ла иҫенән сығармай, сөнки тыуған телендә ижади эш менән шөғөлләнгәндә башҡорт теленең фәнни дәрәжәлә өйрәнелеүе ни тиклем артта ҡалыуын яҡшы аңлай. 1940 йылдың 18 мартында "Ҡыҙыл Башҡортостан" гәзитендә баҫылған "Башҡорт телендәге ҡайһы бер мәсьәләләр тураһында" исемле мәҡәләһендә башҡорт яҙма әҙәби телен артабан үҫтереү, байытыу һәм камиллаштырыу өсөн ниндәй аныҡ саралар күрергә кәрәклеге тураһында яҙа. Мәҡәләлә орфография проекты буйынса гәзит биттәрендә фекер алышыуҙы ойоштороорға тәкдим итә. Ҡайһы бер һүҙҙәрҙең мәғәнәһен аңлатып, уларҙың ҡулланылышындағы айырмалыҡтарын күрһәтә. Мәҫәлән, *тыуған* һәм *туған*, *индерергә* һәм *керетергә*, *барҙы килә* һәм *бараһым килә* һүҙҙәренең үҙаллы лексик һәм грамматик мәғәнәләре булыуына халыҡ теленән миҫалдар килтерә. Башҡорт теленең әйтелеш нормаларын тәртипкә килтереү өсөн махсус комиссия төҙөргә кәрәклеген әйтә: "Телде артабан байытыу, үҫтереү өсөн дөйөм халыҡ телен, халыҡ ижады әҫәрҙәрен төп нигеҙ итеп алырға кәрәк". Ғалим бөтә ғүмерен башҡорт филологияһын юғары фән дәрәжәһенә күтәреү эшенә арнай.

Ж.Ғ.Кейекбаевтың фәнни эшмәкәрлегенең тәүге осоронда орфоэпия мәсьәләләре ҙур урын алды. Уның журналдарҙа һәм гәзиттәрҙә дөрөҫ әйтелеш проблемаһының төрлө аспекттарына арналған мәҡәләләре берҙер артлы баҫылып сыға торҙо. "Башҡорт телендә дөрөҫ әйтелеш мәсьәләһенә ҡарата", "Башҡорт телендә орфоэпия мәсьәләһе", "Башҡорт әҙәби теленең орфографияһы хаҡында" һәм башҡа мәҡәләләрендә ул шул ваҡыт өсөн көнүҙәк мәсьәләләрҙе күтәреп сыҡты. Был мәҡәләләрҙә орфоэпияның теоретик нигеҙҙәре менән бергә уның ғәмәли әһәмиәте лә яҡтыртылды. Ул саҡта ғалимдың дөрөҫ әйтелеш мәсьәләләрен бойомға ашырыу һәм уҡытыу буйынса тәжрибәһе ҙур ине инде. Ул Мәскәү сит ил телдәре институтында уҡып йөрөгән сағында Мәскәү дәүләт консерваторияһының башҡорт студияһында башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы булып эшләй. Мәскәүҙән ҡайтҡас та Жәлил Ғиниәт улы Өфөләге театрҙарҙа, радио һәм гәзит редакцияларында дөрөҫ әйтелеш буйынса дәрестәр бирә. Уның фәнни эшмәкәрлегенең тормош менән тығыҙ бәйләнештә булыуы тәүге ижад йылдарында уҡ асыҡ күренә.

Илленсе йылдарҙа Жәлил Кейекбаевтың фәнни һәм ижади эшмәкәрлеге тематик яҡтан шаҡтай киңәйә. Был йылдарҙың тәүге этабында ғалим башҡорт теленең диалекттарын өйрәнеүгә күп көс һала. 1952—1954 йылдарҙа ул Башҡорт дәүләт педагогия институтының диалектологик экспедицияларын ойоштора. Экспедиция менән бергә ул Силәбе һәм Ҡурған өлкәләренең башҡорт райондарында һәм Башҡортостандың бик күп төбәктәрендә була. Йыйып алынған материалдар ике тапҡыр ҡулъяҙма журнал итеп сығарыла.

Башҡорт педагогия институтында студенттарҙың 1953 йылда сығарылған диалектология буйынса ҡулъяҙма журналында Жәлил Ғиниәт улы ерле һөйләштәргә арналған ике мәҡәлә менән сығыш яһай. Тәүге мәҡәләһендә Силәбе башҡорттарының үҙенсәлекле Бүре һөйләшенә ентекле анализ бирелә. ”Ғафури районының Ҡаранйылға ауылы һөйләше” исемле икенсе мәҡәләһендә үҙенең тыуып үҫкән ауылының һөйләше хаҡында һүҙ алып бара. Был емешле сәфәрҙәр хаҡында ғалим матбуғатта ”Башҡорт диалекттарын өйрәнеү буйынса экспедиция” исемле мәҡәлә менән сығыш яһай (”Совет Башҡортостаны”, 1952 йыл, 10 август). Унда диалекттарҙы һәм һөйләштәрҙе өйрәнеүҙең әһәмиәте, башҡорт теленең лексик нормаларын асыҡлауҙа, әҙәби телде байытыуҙа уларҙың урыны ҙур булыуы тураһында һүҙ бара. Был йылдарҙа Жәлил Кейекбаев диалектология темаһына йәнә бер нисә тапҡыр мөрәжәғәт итә. ”Һөнәр диалекты” исемле мәҡәләһендә (”Совет Башҡортостаны”, 1952 йыл, 7 декабрь) Ҡурған башҡорттарының ҡайһы бер тел үҙенсәлектәренә туҡтала. Кәрәклек-тейешлек модаллегенең әҙәби телдәге ”барырға кәрәк”, ”килергә кәрәк” формалары урынына был һөйләштә ”барғаны кәрәк” һәм ”килгәне кәрәк” формаларын ҡулланыуын, мөмкинлек һәм мөмкин түгеллек модаллегенең ”барай алманым”, ”күрәй алманым” кеүек формаларының ”һорай алманым”, ”уҡый алманым” формаларына оҡшаш яһалыуын күрһәтә.

Һөйләш һәм диалекттарҙы ентекләп өйрәнеү Жәлил Ғиниәт улына башҡорт диалекттары хаҡында капиталь хеҙмәттәр тыуҙырырға мөмкинлек бирҙе. Илленсе йылдарҙың икенсе яртыһында уның хеҙмәттәрендә башҡорт теленең диалекттарын һәм һөйләштәрен фәнни нигеҙҙә классификациялау халыҡ тарихы һәм йәмғиәт тарихы менән бәйләнештә бирелә. Ж.Ғ.Кейекбаев ”Башҡорт диалекттары тураһында” (”Башҡортостан уҡытыусыһы”, 1957, №7, 8), ”Башҡорт диалекттары һәм уларҙың тарихына ҡыҫҡаса инеш” (БДУ, Ғилми яҙмалар, 3-сө сығарылыш, Башҡорт диалектологияһы серияһы, Өфө, 1958), ”Башҡорт теленең диалекттары тураһында” (”Башҡорт теле уҡытыусыларына ярҙамға”. Өфө, 1960, 3—31-се биттәр) кеүек хеҙмәттәр яҙҙы.

Үрҙә әйтелгәнсә, үҙенең лингвистик эшмәкәрлегенең тәүге осоронда ул күберәк орфоэпия мәсьәләләре менән шөғөлләнде. Ж.Ғ.Кейекбаевтың кандидатлыҡ диссертацияһы ла башҡорт әҙәби теленең дөрөҫ әйтелеше мәсьәләләренә бағышланғайны. Был хеҙмәт 1964 йылда айырым китап булып донъя күрҙе (Ж.Ғ.Кейекбаев. Башҡорт әҙәби теленең дөрөҫ әйтелеше. Өфө, 1964). Профессор Н.К.Дмитриев был хеҙмәттең теоре-

тик һәм ғәмәли ҡиммәтен диссертацияға биргән баһаламаһында түбәндәгесә билдәләй: ”Ж.Ғ.Кейекбаевтың был эше башҡорт филологияһы һәм башҡорт тел белеме тураһында яҙылған фәнни тикшеренеүҙәр араһында бөтөнләй айырым бер урын алып тора. Быға тиклем башҡорт теленең орфоэпияһын өйрәнеүгә берәү ҙә тотонғаны юҡ ине әле. Башҡорт театры һәм радиоһы өсөн, шулай уҡ мәктәптәрҙә башҡорт теле уҡытыу процесында актуаль булған был тема Ж.Ғ.Кейекбаев тарафынан бик киң эшләнгән. Унда беҙ орфоэпияның дөйөм билдәләмәһен дә, башҡорт телендәге өндәрҙең классификацияһын да, уларҙың фонетик характеристикаһын да, башҡорт теленең баҫымы һәм интонацияһы тураһында очерк та таба алабыҙ. Был мәсьәләләрҙең күбеһе автор тарафынан тәүге тапҡыр ҡуйылған һәм күбеһенсә дөрөҫ хәл ителгән. Редукция, интонация, мелодия һәм башҡорт һөйләштәрен интонацион группаларға бүлеү кеүек деталдәр талантлы һәм күҙәтеүсән автор тарафынан яһалған ысын фәнни асыш һанала.

Башҡорт телселәре араһында Ж.Ғ.Кейекбаевҡа тиклем башҡорт теленең орфоэпияһы тураһында тикшеренеүсе кеше булманы, был өлкәлә авторҙы ысын-ысындан новатор тип иҫәпләргә кәрәк. Авторҙың рус телен, башҡа бер нисә Европа телдәрен һәм дөйөм фонетиканы яҡшы белеүе ҡуйылған мәсьәләне методик яҡтан дөрөҫ сисергә һәм шул методиканы башҡорт теле материалына яраҡлаштырырға ярҙам иткән. Башҡорт теленең факттарын нигеҙ итеп алып, автор уларҙы рус теле, татар һәм башҡа төрки телдәре менән сағыштырған. Был сағыштырма материал уның хеҙмәтенең филологик ҡиммәтен күтәрә һәм тәрәнәйтә, икенсе яҡтан, уны практик ҡулланма итеп файҙаланырға мөмкинлек бирә. Үҙенең сифаты яғынан хеҙмәттең ҡиммәте, һис шикһеҙ, ҙур: ул яҡшы лингвистик мәктәп үткән һәм әсә телен тәрән белеүсе кеше тарафынан яҙылған” (Ж.Ғ.Кейекбаев. Күрһәтелгән хеҙмәт. Баш һүҙ, 5—6-сы биттәр).

Ж.Ғ.Кейекбаев был хеҙмәтендә башҡорт теле орфоэпияһының теоретик нигеҙҙәрен асыҡланы, башҡорт теленең орфоэпик ҡағиҙәләре, йәғни ”дөрөҫ әйтелеш нормалары телдең динамикаһында уның йәнле һөйләү формаһы менән бергә барлыҡҡа килә” тип, орфоэпияның орфографиянан айырмаһын күрһәтте. Орфография, йәғни дөрөҫ яҙыуҙың һәм орфоэпия, йәғни дөрөҫ әйтелештең сиктәрен, улар араһындағы мөнәсәбәтте профессор Ж.Ғ.Кейекбаев телдең бөтә ҡатламдарынан килтергән бай фактик материал нигеҙендә иҫбатланы. Уның фекеренсә, орфография ҡағиҙәләре, һүҙҙең яҙылышы уның статик, йәғни тыныс торғандағы хәленән сығып билдәләнһә, орфоэпия ҡағиҙәләре, һүҙҙең дөрөҫ әйтелеш нормалары телмәр ағышында, һүҙбәйләнештәр һәм һөйләмдәр эсендә өндәрҙең үҙгәрешенә ҡарап билдәләнә.

Китапта орфографияның әһәмиәте хаҡында һөйләгәндә, ғалим милли телдең үҙенә генә хас үҙенсәлектәре хаҡында оригиналь фекер йөрөтә. Уның уйынса, орфоэпия ҡағиҙәләрен танымау, тел культураһының түбән булыуынан, телдең милли үҙенсәлеген һанға һуҡмауҙан килеп сыға. Ж.Ғ.Кейекбаевтың был хеҙмәтендә фонетика һәм фонология фәндәре-

неӊ ғилми нигеҙҙәре асып бирелде. Ул башҡорт тел белемендә тәү тапҡыр ритмик группалар, телмәр ағышындағы паузалар, сингармонизм, баҫым һәм баҫым төрҙәре һәм телмәр мелодикаһы тураһында фәнни аңлатмалар бирҙе.

Был хеҙмәттә шулай уҡ әҙәби тел төшөнсәһенә яңы, өҫтәлмә асыҡлыҡ индерелә. Атаҡлы рус тел ғалимы академик Л.В.Щерба 1939 йылда яҙған ”Хәҙерге рус әҙәби теле” исемле мәҡәләһендә, телдең әҙәби тел дәрәжәһенә күтәрелеүе өсөн уның бөтә халыҡҡа аңлайышлы булыуы тәү шарт, тип билдәләй һәм халыҡ ижады әҫәрҙәренең ошо талапҡа яуап биреүе хаҡында: ”...Бөтәһенән элек әҙәби тел менән яҙма телде бутауҙан һаҡ булырға кәрәк: һәр бер яҙма тел, ул терминды мин аңлаған мәғәнәлә, әлбиттә, әҙәби тел була ала, ләкин әҙәби телдең яҙма тел булыуы мотлаҡ шарт түгел. Ораторлыҡ телмәренең күп төрҙәре быға бик асыҡ миҫал була. Шулай уҡ халыҡ ижадының төрлө жанрҙары ла, былиналар йәки йырҙар булһынмы, әкиәттәр, хикәйәләр йәки көләмәстәр булһынмы, әҙәби тел һанала”, — тип яҙған. Ошо ҡараштарға нигеҙләнеп, Жәлил Кейекбаев, башҡорт халыҡ ижады әҫәрҙәре — әҙәби телдең һөйләү формаһы, тигән фекергә килә. Был башҡорт филологияһы өсөн принципиаль яңы ҡараш булды.

Ж.Ғ.Кейекбаевтың докторлыҡ диссертацияһы башҡорт теленең фонетик һәм фонологик системаһын тикшереүгә арналған. Был эшен Мәскәүҙә, СССР Фәндәр академияһының Тел белеме институтында ҙур уңыш менән яҡлай һәм ғилми совет ағзалары бер тауыштан уны филология фәндәре докторы тигән дәрәжәгә лайыҡ тип таба. Диссертацияның ҡыҫҡартылған варианты 1958 йылда ”Башҡорт теленең фонетикаһы (тасуири һәм сағыштырма-тарихи тикшеренеү тәжрибәһе)” тигән исем менән айырым китап булып баҫылып сыҡты.

*Ж.Кейекбаев ғаиләһе менән*



Хеҙмәттә башҡорт теленең фонемалары башҡа төрки телдәренең фонемалары менән синхрон (тасуири) һәм диахрон (тарихи) планда сағыштырылып тикшерелә. Башҡорт теленең фонемалары башҡа төрки һәм алтай телдәре факттары менән сағыштырма-тарихи планда ҡаралғанлыҡтан, был телдәрҙең ҡәрҙәшлеге, уларҙың барлыҡҡа килеүе, артабанғы үҫеше һәм хәҙерге хәле тураһында мәғлүмәт хеҙмәттең инеш бүлегендә бирелә.

Ж.Ғ.Кейекбаев был хеҙмәтендә башҡорт тел белемендә тәү тапҡыр телмәр аппаратының төҙөлөшөн асыҡлай һәм өндәрҙе физик (акус-

тик) һәм физиологик (биологик) яҡтан ентекле ҡылыҡһырлай. Шулай уҡ башҡорт тел белемендә беренсе мәртәбә фонема һәм фонема варианты мәсьәләһе хәл ителә. Билдәле булыуынса, фонема теорияһы хәҙерге тел белемендә иң ҡатмарлы мәсьәләләрҙең береһе һанала. Хеҙмәттә фонема һүҙҙәрҙең тышҡы формаһын барлыҡҡа килтереүсе һәм уларҙың мәғәнәһен дифференциялаусы, йәғни айырыусы минималь берәмек итеп тикшерелә һәм башҡорт теленең фонемалар составына бөтөн бер система рәүешендә анализ бирелә. Тартынҡы һәм һуҙынҡы өндәрҙең позицион үҙгәрештәре телмәр ағышында, йәғни синтагматикала телдең аралашыу ҡоралы функцияһын үтәгәндә асыҡ сағыла. Хеҙмәттә башҡорт теле һуҙынҡыларының һәм тартынҡыларының тәбиғәте бик ентекле һәм профессиональ юғарылыҡта тикшерелгән.

Ғалим үҙенең был тикшеренеүендә башҡорт теленең башҡа төрки һәм Алтай телдәренең характерлы үҙенсәлеген билдәләүсе сингармонизм күренешенең асылын аңлатып биргән.

Лингвистик әҙәбиәттә донъя телдәре үҙҙәренең төп фонологик һәм һүҙ баҫымының үҙенсәлектәренә ҡарап ҙур өс төркөмгә бүленә:

1. Акцентлы телдәр төркөмө. Был төркөмгә Һинд-Европа телдәре, шул иҫәптән рус теле ҡарай. Рус телендә баҫым һүҙҙең төрлө өлөшөнә төшә һәм ул үҙгәреп тора.

2. Тональ телдәр төркөмө. Был төркөмгә Ҡытай-Тибет һәм нилог телдәре инә. Мәҫәлән, ҡытай телендә һүҙҙең айырым бер тон, мелодия менән әйтелеүенә ҡарап һүҙҙең мәғәнәһе үҙгәрә.

3. Сингармоник телдәр. Был төркөмгә Урал-Алтай һәм индей телдәре инә. Был төркөмгә ингән телдәрҙә, шул иҫәптән башҡорт телендә, баҫым аҙаҡҡы ижеккә төшә, әммә һүҙ тамырындағы өндәрҙең сифаты уның ялғауҙарындағы өндәрҙең сифатын билдәләй. Тамыр ҡалын һуҙынҡыларҙан торһа, ялғауҙар ҙа ҡалын һуҙынҡыларҙан килә һәм, киреһенсә, тамыр нәҙек һуҙынҡыларҙан торһа, ялғауҙар ҙа нәҙек һуҙынҡыларҙан төҙөлә. Миҫалдар: *королош-то, төҙөлөш-төң, ҡайт-ыу-ҙы, кил-еү-ҙе* һ.б. Хеҙмәттә аңҡау һәм ирен гармонияһы, тартынҡыларҙың гармонияһы, сингармоник параллелизмдар, уларҙың килеп сығыуы һәм сингармоник параллелизмдарҙа мәғәнә айырымлығы бай фактик материал нигеҙендә бик тәрән өйрәнелгән. Хеҙмәттең аҙаҡҡы бүлегендә башҡорт теленең баҫым системаһы ла ентекле тикшерелә. Әйтергә кәрәк, бында күп мәсьәләләр башҡорт тел белемендә генә түгел, тюркологияла тәү башлап ҡуйылған һәм хәл ителгән.

Башҡорт телендә баҫымдың башлыса экспиратор баҫым булыуын әйтеп, уның ғәҙәттә аҙаҡҡы ижеккә төшөүен күрһәтеп, Ж.Ғ.Кейекбаев баҫымдың грамматик функцияһын, ике һәм өс һүҙ рамкаһында баҫымдың урынын, рус теленән үҙләштерелгән һүҙҙәрҙең баҫымын ғәйәт ҙур оҫталыҡ менән асып биргән.

Автор был китабында эске реконструкция методын бик уңышлы ҡуллана. Ошо метод ярҙамында теге йәки был элементтың боронғо варианты хәҙерге телдәрҙең факттарын тарихи сағыштырыу нигеҙендә табыла.

1966 йылда Башҡортостан китап нәшриәте профессор Ж.Ғ.Кейекбаевтың башҡорт теленең һүҙлек составын тикшереүгә бағышланған ”Хәҙерге башҡорт теленең лексикаһы һәм фразеологияһы” исемле хеҙмәтен баҫтырып сығарҙы. Иң элек шуны әйтергә кәрәк: быға тиклем башҡорт теленең һүҙлек составы махсус өйрәнелгәне юҡ ине. Ғалим иһә был хеҙмәтендә башҡорт лексикологияһын айырым бер ғилми йүнәлеш дәрәжәһенә күтәреп өйрәнде. Шул сәбәпле башҡорт лексикологияһының күп мәсьәләләре дөйөм теоретик положениелар нигеҙендә өр-яңынан тикшерелде һәм уларға яңы күҙлектән лингвистик баһа бирелде.

Билдәле булыуынса, башҡорт телендә лә башҡа телдәрҙән үҙләштерелгән һүҙҙәр күп. Мәҫәлән, телсе ғалим Ғ.Ҡаһарманов күрһәтеүенсә, 1993 йылда донъя күргән ”Башҡорт теленең аңлатмалы һүҙлеге” 55 мең һүҙ һәм фразеологик берәмекте үҙ эсенә алған. Шуларҙың 63 проценты төп башҡорт һүҙҙәре, 37 проценты үҙләштерелгән һүҙҙәр. Үҙләштерелгән һүҙҙәрҙең 12 проценты ғәрәп сығанаҡлы, 2 процентын фарсы һүҙҙәре тәшкил итә, 23 проценты рус теленән һәм рус теле аша көнбайыш һәм башҡа телдәрҙән килеп ингән. Хеҙмәттең авторы үҙләштерелгән һүҙҙәргә характеристика биргәндә, тарихи шарттарҙы беренсе планға ҡуйҙы. Тап ошо нигеҙҙә ул был проблема буйынса башҡорт фәнендә яңы һөҙөмтәләргә килә, яңы ғилми гипотезалар төҙөй. Жәлил Ғиниәт улы Кейекбаевтың был хеҙмәте баҫылып сыҡҡанға тиклем, лингвистик әҙәбиәттә ғәрәп һәм фарсы телдәренән алынған һүҙҙәр һәр икеһе айырым тикшерелмәне, ғәрәп һәм фарсы телдәренән һүҙ үҙләштереү ислам диненең йоғонтоһо менән генә аңлатылды.

Профессор Ж.Ғ.Кейекбаев ғәрәп һәм фарсы һүҙҙәренең төрлө системалы телдәргә ҡарауын, ғәрәп һәм фарсы һүҙҙәренең төрлө социаль ерлектә килеп инеүҙәрен иҫбатланы. Башҡорттар фарсы (иран) телле Хорезм дәүләте, Хива һәм Бохара ханлыҡтары менән боронғо дәүерҙә үк сауҙа иткән. Был тарихи фактты хәҙерге башҡорт телендә әүҙем ҡулланылған фарсы һүҙҙәре раҫлай. Миҫалдар: *сауҙа, сауҙагәр, баҙар, баһа, фирүзә, гәүһәр* (бриллиант), *зәргәр* (ювелир), *науруз, шәл, шәкәр, насар, дарыу, нокот, дана, карауан, хәнйәр, хөриә, хушбуй, көмбәҙ, тамға, таҫтамал, шәһәр, келәм, майҙан, сафьян, сирек, шәмдәл*.

Үзбәк ғалимы Сабирйән Ибраһимовтың үзбәк теленең профессиональ лексикаһына арналған хеҙмәтенә баһаламаһында (1960) Ж.Ғ.Кейекбаев башҡорттарҙың боронғо иран һәм үзбәк ҡалалары менән сауҙа бәйләнештәре булғаны халыҡ ижады әҫәрҙәрендә лә сағылыуын әйтеп, түбәндәге йырҙы килтергән:

Алтын ғына йөҙөк фирүзә ҡаш
Бохарадин түгел Хиуадин.
Көмөш кенә йөҙөк фирүзә ҡаш
Төшөп тә генә китте дарьяға.

Китапта башҡорт телендә ҡулланылған ғәрәп һүҙҙәре ҡатламына ла ҙур иғтибар бирелгән. Әлбиттә, ғәрәп һүҙҙәренең байтаҡ өлөшө ислам дине менән бергә килеп ингән. Улар X—XI быуаттарҙа үҙләштерелә башлаған. XVI быуатҡа ҡараған башҡорт шәжәрәләрендә ғәрәп һүҙҙәре байтаҡ осрай. Ғәрәп һүҙҙәре уҡымышлы кешеләрҙең хеҙмәттәре, китап теле ярҙамында ла күпләп ингән. Хәҙерге телдә ғәрәп һүҙҙәре башҡорт донъяһының күп яҡтарына ҡараған төшөнсәләрҙе белдерә. Дини йөкмәткеле ғәрәп һүҙҙәре: *алла, тәһәрәт, мосолман, мулла, иман, назарат, ҡиәмәт, сауап, фәрештә, фатиха, тамуҡ, фәтүә, ғәйет, ғөшөр, хәҙрәт*. Китапта фән, көнкүреш һәм башҡа өлкәләргә ҡараған бик күп ғәрәп һүҙҙәренә анализ бирелгән: *аҡыл, аҫаба, аманат, ант, битараф, ваҡыт, ватан, васыят, вәғәҙә, ғалим, ғүмер, дәрес, дәфтәр, донъя, иншаи, исем, ҡәләм, ләззәт, милләт, мәктәп, мәғариф, нәҫер, нәфис, рәйес, рәссам, рәүеш, сифат, тәжрибә, тәфтиш, фән, фекер, фәлсәфә, хөкүмәт*.

Рус теленән ингән һүҙҙәр хаҡында һүҙ барғанда, Жәлил Кейекбаев уларҙың боронғораҡ һәм һуңғы осорҙа үҙләштерелеүҙәренең социаль ерлектәрен, сәбәптәрен асып бирә. Шуныһы характерлы, ул 1956 йылда ”Совет Башҡортостаны” гәзитендә рус теленән боронғо осорҙа кергән һүҙҙәр хаҡында махсус мәҡәлә менән сығыш яһаны. Был мәҡәләлә башҡорт теленә рус теленән һүҙҙәр үҙләштереүҙең бик боронғо замандарҙан уҡ башланыуын күрһәтә, сөнки, автор әйтеүенсә, башҡорттар рус кенәзлектәре менән Башҡортостан Рәсәй дәүләтенә ҡушылғанға тиклем үк сауҙа итер булған. Шул сәбәпле башҡорт теленең йәнле һөйләштәрендә бик күптән үҙләштерелгән һүҙҙәр байтаҡ. Мәҫәлән: *эрәүез* (ревизия), *дайса* (дача), *курмауай*, *ошкол* (школа), *йөҙәк* (едок), *йәүетсәгә барыу* (явиться)...

Хеҙмәттә стилистика мәсьәләләренә лә ҙур урын бирелгән. Башҡорт теленең стилистик системаһы тел белемендә һуңғы йылдарға тиклем ныҡлап өйрәнелмәгән проблема булып ҡала килә. Был хәлдең объектив сәбәбе лә бар, әлбиттә. Стилистика фәненең предметы, бурыстары, уның йөкмәткеһе һәм, ғөмүмән, стиль проблемаһы фәндә аҙағынса асыҡланмаған мәсьәлә иҫәпләнә. Хәҙерге көндә мәсьәләнең башҡорт фәнендә көнүҙәккә әйләнеүе шунан килә: башҡорт теле һуңғы ярты быуат эсендә функциональ яҡтан да, структур йәһәттән дә үҙгәрҙе, уның йәмғиәттәге функциялары бермә-бер артты, шул сәбәпле телдең стилистик дифференцияһы артабан ҡатмарлашты.

Ж.Ғ.Кейекбаев башҡорт стилдәренә тарихи экскурс биреү менән бергә, уларҙың үҫеш юлдарын асыҡлай, хәҙерге көндә стилистиканы тикшереү алымдарын күрһәтә. Лингвистик стилистика һәм жанрҙар стилистикаһының тикшереү объекттарын һәм уларҙың йөкмәткеһен билдәләй.

1972 йылда Ж.Ғ.Кейекбаевтың ”Урал-Алтай тел белеменә инеш” (рус телендә) исемле китабы баҫылып сыҡты. Был хеҙмәтендә ғалим Урал-Алтай телдәренең генетик, йәғни материаль ҡәрҙәшлеген билдәһеҙлек һәм билдәлелек теорияһы нигеҙендә иҫбат итә. Был теория шуның өсөн нигеҙ итеп алына, сөнки билдәлелек һәм билдәһеҙлек категорияһы Урал-Алтай телдәренең бөтә грамматик системаһы өсөн

характерлы категория булып, исем һүҙҙәр һәм ҡылымдарҙа төрлө саралар менән белдерелә. Был категорияның асылы шунда: телдәрҙең боронғо үҫеш этабында объектив ысынбарлыҡтағы күренештәр, предметтар, хәл-ваҡиғалар халыҡтарҙың аңында йә билдәле, йә билдәһеҙ планда сағылған. Билдәһеҙлек һәм билдәлелек махсус грамматик саралар системаһы менән бирелә. Мәҫәлән, тәбиғәттә һәм йәмғиәт тормошондағы предметтар, әйберҙәр һәм күренештәр һөйләүсе өсөн һөйләү мәлендә таныш булырға, таныш булмаҫҡа мөмкин. Әгәр ҙә хәл-ваҡиғалар, күренештәр һәм уларҙың башҡа предметтарға, күренештәргә мөнәсәбәте һөйләүсегә йә тәғәйен ситуация буйынса, йә был ваҡиғаларҙа уның үҙе ҡатнашыуы сәбәпле таныш булһа, һөйләмдә билдәлелекте белдереүсе грамматик саралар ҡулланыла. Хеҙмәттә бөтә Урал-Алтай телдәрендә билдәлелекте һәм билдәһеҙлекте белдереүсе грамматик саралар тарихи планда тикшерелә. Был йәһәттән иллегә яҡын тел һәм диалект материалдары йәлеп ителә. Ошо материалдарҙың тел факттарын математик логика нигеҙендә, аксиоматик алым ярҙамында баһалағандан һуң, Ж.Ғ.Кейекбаев Урал-Алтай телдәрендә грамматик формалары барлыҡҡа килеүе һәм артабанғы үҫеше бер структур модель буйынса барған тигән һығымтаға килгән. Шуны өҫтәп әйтергә кәрәк, Урал-Алтай телдәренең структур дөйөмлөгө Ж.Ғ.Кейекбаевтың 60-сы йылдарҙа яҙылған башҡа хеҙмәттәрендә лә яҡтыртылды.

1967 йылда Мәскәүҙә төрки телдәренең тарихи грамматикаһын төҙөү буйынса симпозиум саҡырылды. Симпозиумда Ж.Ғ.Кейекбаев Урал-Алтай телдәренең ҡәрҙәшлеге хаҡында доклад менән сығыш яһаны. Был йыйында ҡатнашыусы Ә.М.Аҙнабаев Ж.Ғ.Кейекбаевтың докладының унда ҡатнашыусыларҙа ҙур ҡыҙыҡһыныу уятыуы хаҡында былай тип яҙҙы: "Симпозиум тулы өс көн эшләне. Күп докладтар булды, әммә уларҙың күбеһе иғтибарһыҙ үтеп китте. Симпозиумдың ҡап ярты ваҡытын Жәлил Ғиниәтовичтың докладын тикшереү алды. Күп ғалимдар Жәлил Ғиниәтовичтың сығышын һәм хеҙмәттәрен шатланып, ҡәнәғәтләнеп ҡаршы алды, ҡайһылары уның идеяларын шунда уҡ аңлай алманы һәм кире ҡағырға тырышты. Ҡыҫҡаһы, Жәлил Ғиниәтовичтың докладын һәм проспекттары симпозиумда ҙур бәхәс тыуҙырҙы" (Ә.Аҙнабаев). (Ж.Ғ.Кейекбаев. "Башҡортостан уҡытыусыһы", 1969, № 3, 48-се бит).

Симпозиум эшенә йомғаҡ яһағанда атаҡлы тюрколог, академик А.Н.Кононов Ж.Ғ.Кейекбаевтың хеҙмәттәренә юғары баһа бирҙе. "Төрки һәм башҡа Урал-Алтай телдәренең тарихы 200 йылдан ашыу өйрәнелә, бының өсөн төрлө юлдар, ысулдар ҡулланылды, ләкин уларҙың береһе лә телəгән һөҙөмтәгә килтермәне. Ә һуңғы йылдарҙа Өфөлә профессор Кейекбаев Ж.Ғ. һәм уның мәктәбе был өлкәлә ҙур уңыштарға өлгәшкән. Был бәхәсһеҙ факт, шулай булғас, бөтәбеҙгә лә Кейекбаевтың хеҙмәттәрен һәм уның эш алымдарын өйрәнергә, уның мәктәбе менән танышырға кәрәк. Башҡа юлды мин хәҙергә күрмәйем".

Урал-Алтай телдәренең генетик ҡәрҙәшлеген өйрәнеүҙең ҙур тарихы бар. Әйтергә кәрәк, был проблема буйынса бер-береһенә ҡапма-ҡаршы

ике лингвистик йүнәлеш йәшәй. Беренселәре (швед ғалимы Ф.С.Страленберг, немец ғалимдары В.Шотт, Г.Винклер, М.А.Кастрен, О.Бетлингк, венгр ғалимдары В.Преле, Д.Фокош-Фукс, фин ғалимы М.Рясянен, совет тюркологтары В.И.Лыткин, К.Е.Майтинская, Ж.Ғ.Кейекбаев, М.Зәкиев) Урал-Алтай телдәренең генетик ҡәрҙәшлеген таный, икенселәре (фин ғалимы Г.Рамстедт, поляк ғалимы В.Котвич, совет ғалимдары Н.А.Баскаков, Д.Санжеев, Е.И.Убрятова, А.Н.Кононов һ.б.) тик алтай телдәренең генә генетик ҡәрҙәшлеге иҫбат ителергә мөмкин тип һанай.

Ж.Ғ.Кейекбаев 60-сы йылдар башында Урал-Алтай телдәренең генетик һәм типологик ҡәрҙәшлеген ныҡлап тикшерә башланы. Ул был осорҙа үҙенең яңы теорияһы хаҡында төрлө баҫмаларҙа унлап мәҡәлә баҫтырҙы, фекерҙәрен күренекле алтаистар һәм тюркологтар менән уртаҡлашты. Илебеҙҙең фән үҙәктәрендә ойошторолған симпозиумдарҙа һәм конференцияларҙа докладтар менән сығыш яһаны, шулай уҡ күп университеттарҙа лекциялар һәм махсус курстар уҡыны. Аҙаҡ килеп, Урал-Алтай телдәренең генетик һәм типологик ҡәрҙәшлегенә арналған ”Урал-Алтай телдәре тарихи грамматикаһының нигеҙҙәре” тигән фундаменталь хеҙмәт яҙҙы. Был хеҙмәт рус телендә ”Основы исторической грамматики урало-алтайских языков” исеме менән донъя күрҙе (Уфа, 1996). Ғалим был хеҙмәтте яҙыу өсөн Урал-Алтай телдәре ғаиләһенә ингән төрки, фин-уғыр, тунгус-манчжур, самадий телдәрен теоретик йәһәттән дә, ғәмәли йәһәттән дә ныҡлап өйрәнде. Ул Мәскәү, Ленинград, Будапешт, Ташкент, Алматы, Тарту, Ҡазан кеүек ҙур фән үҙәктәренең китапханаларында был телдәр буйынса материалдар өйрәнде, ошо проблема буйынса эшләгән ғалимдар менән яҡындан танышып, фекер уртаҡлашты. Миңә шундай бер һөйләшеүҙең шаһиты булырға тура килде. 1963 йылдың апрель айында Жәлил Кейекбаев менән Ҡазанға барҙыҡ. Ул М.З.Зәкиевтың докторлыҡ диссертацияһына рәсми оппонент булып билдәләнгәйне, мин үҙемдең кандидатлыҡ диссертациямды Ҡазан университетының ғилми советына тапшырырға барғайным. Мәскәүҙән Тел ғилеме институтынан рәсми оппонент сифатында күренекле ғалим, фин-уғыр телдәре белгесе Б.А.Серебренников та килгәйне. Беҙҙең илдә Б.А.Серебренников Урал-Алтай телдәренең ҡәрҙәшлеген танымаусы ғалимдарҙың береһе булды. Ж.Ғ.Кейекбаев менән Б.А.Серебренников араһында бәхәс ҡыҙыу барҙы. Жәлил Ғиниәт улы уға көслө дәлилдәр килтерә торғас, Борис Александрович, уйлап ҡарарға кәрәк, тип ризалашты. Әммә Б.А.Серебренников ғүмере буйы был теорияға ҡаршы булды, Урал-Алтай телдәренең ҡәрҙәшлеген танымады.

Жәлил Ғиниәт улының Урал-Алтай телдәренең ҡәрҙәшлеген иҫбатлауҙа уның төрки телдәре буйынса ғәйәт ҙур эрудицияһының роле ҙур булды. Был саҡта ул ”Төрки телдәренең тарихи грамматикаһы нигеҙҙәре” исемле ҙур хеҙмәтен тамамлағайны инде. Бында төрки телдәренең грамматик формалары барлыҡҡа килеүе һәм тарихи үҫеше башҡа Алтай һәм Урал-Алтай телдәре факттары менән сағыштырып

тикшерелә. Төрки телдәрен башҡа Урал-Алтай телдәре менән тарихи һәм типологик планда сағыштырыу һөҙөмтәһендә Ж.Ғ.Кейекбаев күп грамматик формаларҙың тәбиғәтен бөтөнләй яңы методтар менән аңлатып, быға са йәшәп килгән ҡараштарҙың йә иҫкергән, йә нигеҙһеҙ булыуын иҫбатланы. Мәҫәлән, тюркологияла һуңғы йылдарға тиклем исемдәрҙең эйәлек һәм хәбәрлек аффикстарының килеп сығышын зат алмаштарына ҡайтарып аңлаттылар. Миҫалдар: башҡортса *кеше-беҙ, укыусымын, кеше-һең, укыу-сы-һың*; татарса *кеше-сез, укучы-сыз, ата-сыз, баласыз*; үзбәксә *киши-сан;* әзербайжанса *охучу-сан, мүәллим-сән*; ғағаузса *устай-сын, йолжу-сын* һ.б. Әммә был рәүешле фонетик тап килеш системалы түгел. Мәҫәлән, башҡорт телендә исемдең хәбәрлек формаһының 2-се заты күтөлгәнсә *укыусы-һыҙ, кеше-һеҙ* булырға тейеш ине, ләкин был форма *укыусы-һығыҙ, кеше-һегеҙ* рәүешендә килә. Башҡа төрки һәм алтай телдәрендә лә шул уҡ хәлде күрәбеҙ. Әзербайжан телендә исемдәрҙең хәбәрлек ялғауҙары бөтөнләй башҡаса: 1-се зат берлек һанда *-ам/-әм* ялғауҙарын ҡабул итә. Мәҫәлән, *охучу-ам, мүәллим-әм.* 2-се затта күплек һанда *-сыныз/-синиз, -сунуз/-сүнүз аффикстары ялғана. Мәҫәлән*: *охучу-сунуз, мүәллим-синиз*.

Ж.Ғ.Кейекбаев хәбәрлек аффикстарының эйәлекте, билдәлелекте һәм күплекте белдереүсе элементтарҙан тороуын иҫбат итеп, был предметтың бөтә Урал-Алтай телдәрендә системалы рәүештә исемдәрҙә генә түгел, ҡылым формаларында ла бирелеүен күрһәтә.

Ғалимдың Урал-Алтай телдәренең материаль ҡәрҙәшлеге хаҡында фекерҙәре уның "Основы исторической грамматики урало-алтайских языков" (Өфө, 1996) хеҙмәтендә тағы ла яңы дәлилдәр һәм факттар менән иҫбат ителде. Был фундаменталь хеҙмәт хаҡында яҡын киләсәктә төплө фекерҙәр әйтелер, баһа бирелер, әммә шуныһы асыҡ: Жәлил Ғиниәт улының был теоретик хеҙмәте башҡорт һәм төрки тел ғилемендә генә түгел, бөтә донъя фәнендә айырым урын биләп тора.

Жәлил Ғиниәт улы ғилми-методик эшмәкәрлек менән бер рәттән республика һәм илебеҙҙә фәнни кадрҙар әҙерләүҙә лә ихлас ҡатнашты. Ул ике тиҫтәгә яҡын фән кандидаты һәм докторы әҙерләне. Ҙур эрудициялы, талантлы татар телсеһе, төрки һәм башҡа Алтай телдәре белгесе, Тел, әҙәбиәт һәм тарих институты директоры, Татарстан Фәндәр академияһы академигы, профессор М.З.Зәкиев, күренекле башҡорт телсеһе профессор Ғ.Ғ.Сәйетбатталов, ҡаҙаҡ телсеһе филология фәндәре докторы, профессор В.А.Иҫәнғәлиева, күренекле татар телселәре профессорҙар Ғ.Х.Әхәтов, Ғ.С.Әмиров, Ф.Сафиуллина һәм башҡаларҙың ғилми ижадына Ж.Ғ.Кейекбаевтың ярҙамы ҙур булды. Уның фәнни етәкселегендә һәм туранан-тура ҡатнашлығында башҡорт теле буйынса тиҫтәләгән фән докторҙары һәм кандидаттары әҙерләнде.

Ж.Ғ.Кейекбаевтың фәнни һәм ижади хеҙмәте тос. Ул 8 ғилми монографияның һәм дәреслектәрҙең авторы. 100-ҙән артыҡ фәнни мәҡәлә яҙҙы, немец теленән башҡорт теленә тиҫтәләгән әҫәр тәржемәләне, башҡорт халҡының үткәне һәм хәҙергеһе хаҡында оригиналь әҫәрҙәр ижад итте.

Ж.Ғ.Кейекбаев мәғариф эшенә лә ҙур әһәмиәт бирҙе. Үҙенең төп профессияһы булған уҡытыу эшенә айырата ҙур етдилек менән ҡараны. Юғары уҡыу йорттарында иң яуаплы курстар уҡыны, башҡорт теле буйынса вуздар өсөн дә, мәктәп өсөн дә күп һанда дәреслектәр, программалар, уҡыу пландарын яҙыуҙа һәм төҙөүҙә иң әүҙем ғалим булды. Хәҙерге көндә мәктәптәрҙә һәм юғары уҡыу йорттарында башҡорт теленең юғары фән кимәлендә уҡытылыуы күп йәһәттән Жәлил Ғиниәт улының арымаç-талмаç хеҙмәтенең һөҙөмтәһе.

Ж.Ғ.Кейекбаевтың башҡорт әҙәбиәте өлкәһендә лә уңыштары ҙур. Ж.Табын псевдонимы менән утыҙынсы йылдарҙа уҡ башҡорт әҙәбиәтендә киң билдәле була. Ул немец халҡының мәшһүр әҙиптәре Гёте менән Гейне әçәрҙәрен, шулай уҡ Вилли Бредель, Фридрих Вольф, Эрих Вайнерт һәм башҡа немец яҙыусыларының романдарын, повестарын һәм хикәйәләрен немец теленән башҡортсаға ауҙарыу буйынса башҡорт әҙәбиәтендә берҙән-бер белгес ине. Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында Жәлил Ғиниәт улы үҙенең яҡташы, Советтар Союзы Геройы Зөбәй Үтәғолов тураһында, шулай уҡ Советтар Союзы Геройы Александр Матросов хаҡында әçәрҙәр ижад итте. Уның ҡобайырҙары, әкиәттәре уҡыусылар тарафынан яратып ҡабул ителде. Ж.Ғ.Кейекбаев — ”Туғандар һәм таныштар” исемле ҙур романдың авторы. Әçәр башҡорт халҡының революцияға тиклемге тормошон тасуир итә. Шуны әйтергә кәрәк, яҙыусы үҙе һүрәтләгән ваҡиғаларҙы бик яҡшы белә, шул сәбәпле халыҡтың яҙмышы бөтә ысынбарлығында тасуирлана, характерҙар дөрөç бирелә. Был романдың идея-художество кимәлен һәм тел үҙенсәлектәре яғын бөгөнгө башҡорт прозаһының ҙур уңышы тип ҡарарға кәрәк. Әçәр башҡорт һәм рус телдәрендә бер нисә тапҡыр донъя күрҙе. Ж.Ғ.Кейекбаев үҙенең ижадында халыҡтың йәнле һөйләү үҙенсәлектәрен оçта файҙаланды. Уның әçәрҙәрендә фразеологик берәмектәрҙең, мәҡәл һәм әйтемдәрҙең эстетик вазифаһы асыҡ күренә. ”Туғандар һәм таныштар” романында ерле һөйләшкә ҡараған лексик берәмектәр һәм грамматик формалар мул ҡулланылған. Әммә улар әçәрҙең стилистик төҙөлөшөн боҙмай, киреһенсә, айырылғыһыҙ һүрәтләү саралары булып тора.

Аҙаҡ килеп, Ж.Ғ.Кейекбаевтың үҙе хаҡында ла бер нисә һүҙ әйтке килә. Ул ысын мәғәнәһендә интеллигент кеше ине. Һәр саҡ үтә баçалҡы һәм ябай, һәр кешегә ҡарата иғтибарлы, изге күңелле һәм кешелекле булды. Шуға күрәлер, уның һәр тарафта яҡын дуçтары һәм таныштары күп ине, уларҙың һәр береһе менән тығыҙ бәйләнештә йәшәне. Илебеҙҙең ҙур ғалимдары Б.Серебренников, А.Кононов, М.Ширалиев, Н.Баскаков, П.Аристэ, С.Кенесбаев, Ф.Абдуллаев, Л.Йәләй, М.Зәкиев, Ә.Юлдашев һәм башҡа бик күптәр менән йыш аралашып, дуçлашып ғүмер итте. Ул атаҡлы немец яҙыусыһы Фридрих Вольф менән бик яҡын мөнәсәбәттә булған.

Ғалим үҙенең бөтә ғүмерен фәнгә, башҡорт мәҙәниәтенә һәм мәғарифына бағышланы һәм уларҙы үçтереүгә баһалап бөтөргөһөҙ өлөш индерҙе. Уның титаник хеҙмәте Совет Хөкүмәте тарафынан юғары

баһаланды. Жәлил Ғиниәт улы Ленин, ”Почет билдәһе” ордендары һәм миҙалдар менән наградланды, Башҡорт АССР-ының Верховный Советына депутат итеп һайланды, уға шулай уҡ ”БАССР-ҙың атҡаҙанған фән эшмәкәре” тигән маҡтаулы исем бирелде. Ул ҙур филологик эрудициялы ғалим булды. Кешеләргә ҡарата үҙенең аҡыллы, шул уҡ ваҡытта ябай мөнәсәбәте һәм иғтибарлы булыуы арҡаһында ҙур абруй ҡаҙанды. Ул үҙ халҡының тоғро улы ине. Уның менән бергә эшләгән коллектив ысын мәғәнәһендә ижади коллектив була торғайны.

Татар тел ғалимы, күренекле совет тюркологы, Ҡазан дәүләт педагогия институтының ректоры профессор М.З.Зәкиев үҙенең Ж.Ғ.Кейекбаевҡа арналған китабын түбәндәгесә тамамлай: ”Изге эш, дәртле йыр оҙаҡ һаҡлана. Жәлил ағаның да эше изге, тормошо йыр кеүек булды, шуға күрә ул киләсәк быуындар хәтерендә һаҡланыр”.

Ж.Ғ.Кейекбаев үҙен үҙенсәлекле стиль оҫтаһы итеп танытты һәм фактик материалдарҙы тәрән белеүе менән бергә, унда художестволы дөйөмләштереү һәләте ҙур ине.

Жәлил Ғиниәт улының телдәр белеүен, йәғни полиглот булыуын да әйтмәй булмай. Ул күп төрки телдәрендә һәм ҡайһы бер фин-уғыр телдәрендә иркен аралаша торғайны, немец, инглиз һәм башҡа герман телдәрен айырыуса яҡшы белә ине.

Хәтеремдә, 1960 йылдар башында беҙҙең университетҡа Германияның Мартин Лютер исемендәге Галле университетының ҙур делегацияһы килде. Бер мәжлестә Жәлил Ғиниәт улы немец йырҙарын йырлап, ҡунаҡтарҙы хайран ҡалдырғайны.

Халыҡ үҙенең арҙаҡлы һәм тоғро улын онотмай. Уның тыуған ауылы Ҡаранйылғала музей асылды. Башҡорт дәүләт университетында Ж.Ғ.Кейекбаев исемендәге мемориаль кабинет эшләй. Ғафури районы хакимиәте һәм йәмәғәтселеге Ж.Ғ.Кейекбаев исемендәге премияһын булдырҙы. Стәрлетамаҡ башҡорт гимназияһында уға арналған музей асылған.

Өфөлә, Красноусолда Ж.Ғ.Кейекбаев исемендәге урамдар бар. Мәшһүр ғалимдың фәнни һәм әҙәби ижадына арналған конференциялар үткәрелеп тора. Башҡорт дәүләт университетында уның исемендәге премия булдырылған. Ғалимдың ижады һәм тормошо хаҡында һуңғы йылдарҙа тиҫтәләгән мәҡәләләр баҫылды. Шулай ҙа Ж.Ғ.Кейекбаевтың яҡты иҫтәлеген мәңгеләштереү буйынса эшләйһе эштәр бар әле. Беренсе сиратта уның бөтә хикәйәләрен, әкиәттәрен, повесть һәм очерктарын, шиғырҙарын, ҡобайырҙарын, тәржемә әҫәрҙәрен бергә туплап сығарырға кәрәк. Жәлил Ғиниәт улының ”Туғандар һәм таныштар” романының донъя күреүенә 30 йылдан ашыу ваҡыт үтеп китте. Хәҙерге көндә был әҫәрҙе табып уҡыуы мөмкин түгел. Шуға күрә романды яҡын киләсәктә нәшер итеү сараһын күрергә кәрәк.

## Ж.Ғ.Кейекбаевтың төп хеҙмәттәре

1. Башҡорт теленең фонетикаһы (тасуири һәм сағыштырма-тарихи тикшеренеү тәжрибәһе). — Өфө, 1958. 212 б.

2. Башҡорт әҙәби теленең дөрөҫ әйтелеше. — Өфө, 1964. 88 б.

3. Хәҙерге башҡорт теле (Башҡорт дәүләт университетының ситтәге студенттары өсөн лекциялар). — Өфө, 1966. 146 б.

4. Хәҙерге башҡорт теленең лексикаһы һәм фразеологияһы. Уҡыу ҡулланмаһы. — Өфө, 1966. 146 б.

5. Введение в урало-алтайское языкознание. — Уфа, 1972. 152 с.

6. Основы исторической грамматики урало-алтайских языков. — Уфа, 1996. 366 с.

7. Избранные статьи. — Уфа, БашГУ, 2002. 200 с.

8. Хәҙерге башҡорт теленең фонетикаһы. 2-се баҫма. — Өфө, БДУ, 2002.

9. Хәҙерге башҡорт теленең лексикаһы һәм фразеологияһы. — Өфө, 2002.

10. Башҡорт теле. Педагогия училищелары өсөн дәреслек. (Авторҙаштары А.Һ.Ғәлләмов, Һ.М.Аҙнабаев һ.б.). — Өфө: Китап, 1983. 398 б.

## Айырым китап булып сыҡҡан романдары, повестары һәм әкиәттәре

1. Зөбәй Үтәғолов. — Өфө, 1944. 47 б.

2. Әкиәттәр. — Өфө, 1960. 51 б.

3. Лесные сказки. — Уфа, 1963. 32 с.

4. Туғандар һәм таныштар. — Өфө, 1975. 384 б.

5. Родные и знакомые / перевод М.Гафурова. — М., 1985. 320 с.

## Ғилми һәм әҙәби ижады хаҡында донъя күргән хеҙмәттәрҙең ҡыҫҡаса исемлеге

1. Ученый и писатель. Джалиль Гиниятович Киекбаев. Биобиблиография. Составители — профессор М.В.Зайнуллин, кандидат филологических наук В.В.Ганеев. — Уфа, БашГУ, 2001. 96 с.

2. Жәлил Кейекбаев исемендәге премия лауреаттары. Төҙөүсеһе һәм мөхәррире профессор Ғ.С.Ҡунафин. — Өфө, БДУ.

3. Жәлил Кейекбаев музейы. Төҙөүселәре — Ғ.Ш.Шәйәхмәтов, И.Ғ.Шәйәхмәтов, Ғ.С.Ҡунафин. Яуаплы мөхәррире — профессор Ғ.С.Ҡунафин. — Өфө, 2001. 35 бит.

4. Зәкиев М.З. Дәртле йыр (профессор Ж.Ғ.Кейекбаев тураһында иҫтәлектәр). — Өфө, 1974. 68 бит.

5. Жәлил Кейекбаев тураһында иҫтәлектәр. Төҙөүселәре — Ә.Вахитов, Ә.Әминев. — Өфө: Китап, 1989. 184 бит.

6. Зайнуллин М.В. Профессор Дж.Г.Киекбаев. Серия ”Замечательные ученые БашГУ”. — Уфа, 1997. 26 с.

7. Илишев И.Г. К выходу книги Дж.Г.Киекбаева ”Основы исторической грамматики урало-алтайских языков” // Ватандаш, 1996, №1.